# *ЯҘ ТУРАҺЫНДА ШИҒЫРҘАР!*

**Сәләм Яҙ!**

Яҙҙар етте, ҡоштар йылы яҡтан,
Ҡыуанышып осоп ҡайттылар.
Ҡарҙар ireп, ҡара ер асылды,
Йылғаларҙан боҙҙар аҡтылар.
Тимер аттар ояһынан сығып,
Тәүге бураҙнаны ярҙылар.
Һыу буйҙарын һары сәскә япты,
Урман ситен - умырзаялар.
Яҙҙар үтеп, һабантуйҙар етер,
Сәскәләнер ялан, туғайҙар.
Кеше ғүмерен мәлдәр генә үлсәй,
Тик иҫәпһеҙ туҙған туҙандар.

**Ҡоштар ҡанатлы була** / Гөлфиә ЮНЫСОВА

Сыйырсыҡ, һандуғас
Ҡара ҡаурый сыйырсыҡ,
Һары шәлле һандуғас–
Йырсы ҡоштар йылы яҡтан
Ҡайта беҙгә яҙ булғас.

**Тағы ла яҙ...**

Тағы ла яҙ. Йән ҡыуана, ярһый,
Яңы ҡанат үҫкән ҡош кеүек.
Ҡартлыҡ, кәрһеҙлектәр, сир-сырхауҙар
Тузға яҙған буш һүҙ, төш кеүек.
Тағы ла яҙ. Наҙлы гөл-сәскәле
Дала кеүек иркен күңелем.
Яҙ нурына ҡушылып, үрелеп үҫә
Яҙҙай яҡты, керһеҙ ғүмерем.

**Яҙ килә.**

Яҙ килә, яҙ килә!
Ҡарҙар ирей, боҙ китә,
Йылғалар бушап ҡала,
Ағастар япраҡ яра.

Ҡояш нурҙарын һибә,
Тәбиғәт күҙен аса.
Яҙғы елдәр йылы яҡтан
Ҡоштарҙы алып килә.

Ҡоштар оя ҡоралар
Күп бала сығаралар.
Баҡсала эштәр башлана
Тормош дауам ителә.

**Тамсы йыры**\Әнисә ТАҺИРОВА

Тып – тып,
Мин – тамсы,
Һин миңә ҡарап ҡалсы.
Тиҙҙән мин ағып китәм
Йүгерек ҡар һыуы менән.

Тып – тып,
Мин – тамсы,
Усыңды ҡуя һалсы,
Нурҙа сағылтып ҡара,
Миндә күпме төҫ яна.

Тып – тып,
Мин – тамсы,
Мине йыр итеп алсы.
Һәр көн иртә – кис һайын
Көйҙәр көйләп ҡалайым.

Тып – тып,
Мин – тамсы,

Һин миңә ҡарап ҡалсы,
Тиҙҙән мин ағып китәм
Йүгерек ҡар һыуы менән.

**Апрель**\Барый НОҒОМАНОВ

Күк зәңгәр ебәк ябынған,
Ҡояш та ихлас көлә.
Ташҡан йылғалар шауынан
Дәртле моңдар һибелә.
Ҡанатын ҡағып, ҡыуанып,
Сыйырсыҡ, ана, һайрай.
Ер өҫтө тора быуланып,
Ә урман кейем һайлай.
Күр, тирә–яҡ сумған йәмгә,
Күңелгә яҡын был ай.
Йомарт апрель нурҙарынан
Ерем яңыра шулай.

**Тамсы**
Факиһа Туғыҙбаева

Күр әле, күр, ҡарасы:
Ҡыйыҡтан тамды тамсы!
Үҙе бәләкәс кенә,
Үҙе көләкәс кенә.
Тишкеләп бөттө ҡарҙы,
Гөрләүеккә юл ярҙы.
Ҡаңғылдашалар ҡаҙҙар,
Башлана, тиҙәр, яҙҙар.
Ҡыҙыҡ итте шат тамсы,
Ҡоҙоҡҡа инеп ҡасты.

**Яҙ килә.**
Яҙ килә, яҙ килә,
Тамсылар тама ергә.
Ағастарҙа бөрөләр

Күренә башлар бына

Шыбырдашып һыуҙар аға,
Яҙ килгәне күренә.
Бөтә бала урамда
Уйнай, шатлана бергә.

Ҡоштар һайрай шатланып,
Тыуған яҡҡа ҡайтҡанға:
“Шатланышып йәшәйек
Гел генә, бергә генә”.

Тау баштары ала-сола,
Бына шулай яҙ килә.
Гөрләүектәр гөрләп аға,
Ҡояш ҡыуанып көлә.

Шаптыр-шоптыр шыптырлатып,
Көн дә беҙ һыу кисәбеҙ.
Итеккә һыу тулдыниһә,
Ботинкаға күсәбеҙ.

Тамсы тама яҙ ғына,
Күңел тулы наҙ ғына!
Ҡоштар ҙа яҙ һайраша,
Кейенә яҙ байрамса.
Яҙҙы һөйгән өсөн дә
Артып китә көсөм дә;
Хыялыма атланам,
Шатланам мин, шатланам!

**ҠОЯШЛЫ ЯҘ**

Шишмә аға сылтырап,
Нәфис талдар шаулаша.
Яҙ килгәнгә сыйырсыҡтар
Ҡыуанышып һайраша.
Аҡ умырзая болонда

Күкрәп сәскә аталыр.
Яҙҙы ҡотлап, йырсы ҡоштар
Йылы яҡтан ҡайталыр.
Ал ҡояштан бөтә ергә,
Йылы нурҙар һибелә.
Аҡ ҡайындар сағыу йәшел
Бәрхәт еләнен кейә
(А.Айытҡолова)

## ЯҘҒЫ КӨНДӘ

Салт ҡояштан көмөш нурҙар
Яуа ерҙең өҫтөнә.
Ҡыйыҡтарҙан ireп тамған
Тамсы көмөш төҫ кенә.
Өй янында бөгөн Рәжәп,
Йомарлап епшек ҡарҙы,
Олатаһына оҡшатып,
Ҡыш бабай яһап ҡуйҙы.
Ҡояш көлә. Ҡыш бабайҙың
Биле ергә бөгөлә,
Тамсы тама, әйтерһең дә,
Күҙ йәштәре түгелә.
Икенсе көн тышҡа сыҡһа,
Аптырап ҡалды Рәжәп:
Ҡыш бабайы әллә ҡайҙа
Китеп барған — вәт, ғәжәп?!
(Р.Тойғон)